1. **Аҡмулла шишмәһе ниндәй йылғаға ҡоя?**

a. Ағиҙелгә;

b. Күндереккә;

c. Стәрлегә;

d. Димгә.

2. **М. Аҡмулланың нисә улы, нисә ҡыҙы булған?**

a. өс улы, бер ҡыҙы;

b. бер улы, өс ҡыҙы;

c. ике улы, ике ҡыҙы;

d. улдары ла, ҡыҙҙары ла булмаған.

3. М. **Аҡмулланың башҡортса тәүге йыйынтығын әҙерләп баҫтырған текстолог?**

a. Рәшит Шәкүр;

b. Әхәт Вилданов;

c. Зәйтүнә Шәрипова;

d. Мирас Иҙелбаев.

4. **Дөрөҫ яуапты табығыҙ:**

a. Аҡмулланың беҙгә килеп еткән әҫәрҙәре араһында күп кенә шиғырҙар, унлап хикәйә һәм бер повесть һаҡланып ҡалған;

b. Бөйөк шағир хөрмәтенә Өфөлә бер урам уның исемен йөрөтә;

c. Миәкә районы 1989 йылда бөйөк яҡташтары хөрмәтенә Аҡмулла исемендәге премия булдырҙы;

d. Аҡмулла исемендәге премияға беренселерҙән булып М. Кәрим лайыҡ булды.

5. **Хаталы яуапты табығыҙ**:

a. 2007 йылда Анкара ҡалаһында М. Аҡмулланың шиғырҙары төрөксә баҫылды;

b. М. Аҡмулла Силәбе ҡалаһының мосолман зыяратында ерләнгән;

c. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев Аҡмулла менән Өфөлә уның 70 йәшлек юбилейына килгәндә таныша;

d. Совет осоронда Аҡмулланың беренсе китабы ҡаҙаҡ телендә баҫылып сыға.

**6. «Фазыл Мәржәни мәрҫиәһе» нең жанр асылын М. Аҡмулла үҙе нимә тип билдәләй?**

a. ҡасидә;

b. мәдхиә;

c. мәрҫиә;

d. мөнәжәт.

**7. Үҙенең бер әҫәрендә М. Аҡмулла ҡайһы башҡорт кантонын исемләп телгә ала?**

a. Ҡолой кантонды;

b. Сибай кантонды;

c. Азамат кантонды;

d. Буҙыҡаев кантонды.

8. **«Аҡмулла» повесының авторын күрһәтегеҙ**:

a. Рәшит Шәкүров;

b. Ғайса Хөсәйенов;

c. Ғәзим Шафиҡов;

d. Талха Ғиниәтуллин.

**9. Кирәй Мәргәндең ниндәй әҫәрендә Аҡмулла образы үҙәктә тора?**

a. “Бөркөт ҡанаты”;

b. “Өҙөлгән моң”;

c. “Ҡала иртәһе”;

d. “Нарыштау итәгендә”.

**10. М. Аҡмулла премияһына лайыҡ булған әҙипте күрһәтегеҙ:**

a. Кирәй Мәргән;

b. Яныбай Хамматов;

c. Ғайса Хөсәйенов;

d. Марат Кәримов.

11. **М. Аҡмулла ҡайһы ырыу башҡорто?**

a. Юрматы;

b. Тамьян;

c. Ҡыпсаҡ;

d. Мең.

12. **Аҡмулла ҡушаматын шағирға ҡайһы милләт вәкилдәре биргән?**

a. башҡорттар;

b. ҡаҙаҡтар;

c. татарҙар;

d. ҡырғыҙҙар.

13. **М. Аҡмулланың ҡәберен беренсе булып кем тапҡан?**

a. Әхнәф Харисов;

b. Кирәй Мәргән;

c. Рәшит Шәкүр;

d. Әхәт Вилданов .

14. **«Аҡмулла» операһының либреттоһын кем яҙған?**

a. Мостай Кәрим;

b. Ҡәҙим Аралбаев;

c. Рауил Бикбаев;

d. Ишмулла Дилмөхәмәтов.

15. **М. Аҡмулла нисәнсе йылда Башҡортостан яҙыусылар союзына ҡабул ителгән?**

a. 1892 йылда;

b. 1935 йылда;

c. 1981 йылда;

d. Союз ағзаһы булмаған.

**16. Өфөлә М. Аҡмуллаға ҡуйылған һәйкәлдең авторы кем?**

a. В. Дворник;

b. Ө. Ҡобағошов;

c. З. Басыров;

d. Р. Зәйнетдинов.

**17. М. Аҡмулла фекеренсә, кеше өсөн иң кәрәкле сифат?**

a. түҙемлелек;

b. иман;

c. ғәҙеллек;

d. көс.

**18. XX быуатта Аҡмулла традицияларын дауам иттергән шағир:**

a. Шафиҡ Әминев;

b. Ҡадир Даян;

c. Назар Нәжми;

d. Тимер Йосопов.

**19. М. Аҡмулла кем менән сәсәнлектә ярышҡан?**

a. Һабрау йырау менән;

b. Ғәбит сәсән менән;

c. Мөхәмәтша  Буранғолов менән;

d. Нурғош аҡын менән.

**20. М. Аҡмулла ҡайһы сит телде өйрәнеү кәрәк тип һанаған?**

a. инглиз телен;

b. төрөк телен;

c. француз телен;

d. испан телен.

**21. «Аҡмулла – яҡтылыҡ йырсыһы» хеҙмәтенең авторы кем?**

a. Әхнәф Харисов;

b. Рәшит Шәкүров;

c. Әхәт Вилданов;

d. Ғайса Хөсәйенов.

**22. М. Аҡмулла Өфөлә нисәнсе йылда булып киткән?**

a. 1892 йылда;

b. 1893 йылда;

c. 1894 йылда;

d. 1895 йылда.

**23. Ҡаҙаҡтар Аҡмулланың асыл фамилияһы кем тип иҫәпләй?**

a. Мөхәмәтйәров;

b. Мөхәмәтйәнов;

c. Мөхәмәтҡужин;

d. Мөхәмәтсафин.

**24. Кемде М. Өмөтбаев «ғәжәп ҡиммәтле бер аға» тип атай?**

a. ағаһын;

b. атаһын;

c. хәлфәһен;

d. күршеһен.

**25. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев ниндәй волостың мировой посреднигы, һуңынан старшинаһы булып эшләй?**

a. Ғафури;

b. Ҡырмыҫҡалы;

c. Күгәрсен;

d. Архангель.

**26. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев ниндәй ҡалала рус класында шәкерттәргә рус теленән, арифметиканан дәрестәр бирә?**

a. Өфө;

b. Ҡазан;

c. Ырымбур;

d. Стәрлетамаҡ.

**27. Был юлдар М.Өмөтбаевтың ҡайһы шиғыр юлынан алынған** :

**Шифа тапһа берәү сиренә һыуҙан,**

**Зарар килер берәүгә шул дарыуҙан.**

**Ҡыйынһынһа берәүҙең барлығынан**

**Ҡолаҡ ҡағыр шул көнсөл байлығынан.**

a. «Шикәйәт»;

b. «Йомран иле»;

c. «Ҡайыш менән йүкә»;

d. «Бында ерҙең ниғмәттәре».

**28. Аҡҡужа ауыл мәсетенең төҙөүсеһе** :

a. Ғ. Соҡорой;

b. З. Рәсүлев;

c. М. Аҡмулла;

d. Ғ. Кейеков.

**29. «Остаз Мирсалих Биксуринға» тигән шиғырҙың авторы :**

a. М. Өмөтбаев;

b. Р. Фәхретдин;

c. Ғ. Соҡорой;

d. С. Яҡшығолов.

**30. Мирсалих Биксурин ниндәй уҡыу йортонда уҡыта :**

a. Неплюев исемендәге хәрби училище;

b. «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә;

c. «Ғосманиә» мәҙрәсәһендә;

d. ауыл мәктәбендә.

**31. «Шура» журналының сығарыла башлаған ваҡыты** :

a. 1906 йыл;

b. 1907 йыл;

c. 1908 йыл;

d. 1900 йыл.

**32. «Нәсихәттәр» шиғырында Аҡмулла нисә вәғәз бирә?**

a. 7;

b. 5;

c. 8;

d. 2.

**33. М. Өмөтбаевтың «Ҡайыш илә йүкә» әҫәренең жанры?**

a. шиғыр**;**

b. поэма;

c. мәҫәл.

**34. Композицион яҡтан 4 табындан торған әҫәрҙең исеме?**

a. “Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы”;

b. “Илаған бала»;

c. “Ишек төбөндә”.

**35. «Илаған бала» шиғыры ниндәй композицияға ҡоролған?**

a. диалог;

b. монолог;

c. әйләнмә.

**36. 8/8 іижеккә ҡоролған строфалы шиғырҙың иseme?**

a. “Урмансы”;

b. “Йомран иле”;

c. “Ишек төбөндә”.

**37. “Йән һөйгәнде уйлап мин атҡа аштым**

**Ике һөйгән күңел менән утҡа төштөм.**

**Бер күңелдә ике һөйөп, юҡҡа сыҡтым,**

**Аттан төшөп, йәрҙе алмаҡ кәрәк инде” – тигән строфа ниндәй шиғырҙан?**

a. “Нәсихәт”;

b. “Шикәйәт”;

c. “Бер ҡалала гүзәл күрҙем”.

**38.«Сәлимә йәки Ғиффәт» повесының геройы, башҡорт шәкерте, ҡайҙан уҡып ҡайтып килә?**

a. Өфөнән;

b. Ҡазандан;

c. Мәскәүҙән;

d. Бағдадтан.

**39. М. Өмөтбаевтың ниндәй шиғырының һуңғы ике строфаһы акростих менән яҙылған?**

a. “Ниҙән”;

b. “Бер ҡалала Гүзәл күрҙем”;

c. “Минең ғишығым”.

**40. М. Өмөтбаевтың «Дуҫҡа» шиғыры ниндәй өлөштәрҙән тора?**

a. сәсмә;

b. теҙмә;

c. сәсмә һәм теҙмә.

**41. «Звезда поэзии» монграфияһының авторы?**

a. Ғ. Хөсәйенов

b. Р. Шәкүр

c. Ә. Сөләймәнов

d. Ә. Вилданов

**42. М. Өмөтбаевтың ҡатынының исеме?**

a. Ғәбиҙә;

b. Хәтирә;

c. Сәлимә.

**43. М. Өмөтбаев ҡайһы шиғырын Ҡырымда вәҡеф эштәрен тикшереү комиссияһында эшләгән сағында, 1887 йылдың 27 сентябрҙә Симферополдә ижад итә?**

a. “Ниҙән”;

b. “Бында ерҙең ниғмәттәре”;

c. “Йомран иле”.

**44. М. Өмөтбаевтың «Йәдкәр» китабына нисә публицистик яҙмалары теркәлгән?**

a. 21;

b. 12;

c. 33.

**45. М . Өмөбаевтың рус телендә яҙылған мәҡәләләре?**

a. “Аҡмулла”, “Петербург хаҡында күңел мөһөрө”;

b. “Әҙәбиәт һәм мәғрифәт хаҡында”, “Халыҡ мәғарифын юлға һалыу”;

c. “Өршәк күпере”, “Мәскәү хаҡында күңел мөһөрө”.

**46. М. Өмөтбаевтың лексикографик йүнәлештәге хеҙмәте?**

a. “Европа халҡының һүҙҙәре”;

b. “Ғилми хикмәт хаҡында”;

c. “Әҙәбиәт һәм мәғрифәт хаҡында”.

**47. Интиозовр, меголозовр, мостадонт М. Өмөтбаевтың ниндәй мәҡәләһендә телгә алына?**

a. “Аҡ күмер”;

b. “Яңы Зелондия һәм мадагаскар жәзиләренең ғәжәйеп ҡоштары”;

c. “Ғәжәйеп ҙур мәхлүктәр”.

**48. М. Өмөтбаев ғилми хикиәт тип нимәне атай?**

a. математика;

b. геометрия;

c. философия.

**49. М. Өмөтбаевтың юлъяҙмалары нисек атала?**

a. “А. С. Пушкин юбилейы айҡанлы”;

b. “Өршәк күпере”;

c. “Баҡсаһарай ҡалаһында”.

**50. М. Өмөтбаевтың «Бәхетһеҙ ғишыҡ» әҫәре ниндәй шағирҙың ижадынан тәржемә?**

a. А. С. Пушкин “Романс”;

b. С. Крылов “Басня”;

c. М. Лермонтов “Лирика”.

**51. М. Өмөтбаевтың «Мең дә бер кисә» ғәрәп хикәйәтенең тәржемәһе нисек атала?**

a. “Торба, болоç һәм алма хикәйәте”;

b. “Булдым бөтөнләй көсһөҙ”;

c. “Делибаш”.

**52. «Делибаш» әҫәре кем ижадынан тәржемәләнгән?**

a. М. Лермонтов;

b. С. Крылов;

c. А. Пушкин.

**53. М. Өмөтбаевтың «Халыҡ ижады өлгөләре» тигән бүлектә нимәләр бар?**

a. тарихи йырҙар;

b. эпостар;

c. легендалар, мәҡәлдәр.

**54. М. Өмөтбаевтың «Ҡанлыкүл», «Серлегүл» яҙмаларының жанры?**

a. әкиәт;

b. йыр;

c. риүәйәт.

**55. М. Өмөтбаев ниндәй өләңде яҙып алған?**

a. Аҡъегет;

b. Аҡбуҙат;

c. Иҙеүкәй менән Мораҙым.

**56. М. Өмөтбаев : “Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе – үҙ – үҙеңдең сығышыңды, икенсеһе – йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу, өсөнсөһө –… “ нимәне?**

a. халыҡ йырҙарын;

b. әкиәттәрҙе;

c. риүәйәттәрҙе, өләңдәрҙе.

**57. М. Өмөтбаев биргән «Өләң һүҙе» нимәне аңлата?**

a. халыҡ йырын;

b. эпосты;

c. легенданы**.**

**58. М. Өмөтбаевтың «Ғәрәп халҡының аҡыллы һүҙҙәре» тигән яҙмала нисә мәҡәл бар?**

a. 32;

b. 104;

c. 83.

**59. “Һәр кемдең тарихы өйрәнелһен өсөн, уның үҙ Карамзины булыуы шарт” М. Өмөтбаевтың тигән һүҙҙәре ниндәй өлөшкә эпиграф булып тора?**

a. тәржемәләр;

b. халыҡ ижады өлгөләре;

c. тарихи-этнографик яҙмалар.

**60. М. Өмөтбаев тарафынан төҙөлгән шәжәрә нисек атала?**

a. “Кесе табын халҡының нәсәбнамәһе”;

b. “Кесе табын халҡының бабалары”;

c. “Башҡорт халҡының аҡ һәм ҡара көндәре”.